*Алмас ШАММАСОВ*

# "Әсәй миңә ғүмер аҫҡан"

## Әсәйемә

Әсәй миңә ғүмер аҫҡан,
Икһеҙ-сикһеҙ ҡыуанып.
Ана үҙе ҡарап тора,
Айҙай балҡып, йылмайып.

Әсәй миңә ғүмер аҫҡан:
«Йәшәрт иленде! — тиеп, —
Ғүмерең менән, шиғырың менән
Йәшәт телеңде!» — тиеп.

Ғүмер аҫҡан.
Теләк теләп,
Изге юлға йүнәлткән.
Намыҫ шәмен һүндермәйсә
Барырға ул өйрәткән.

Ғүмер аҫҡан:
«Бар халыҡты
Матурлыҡҡа илтер, — тип, —
Оло, бөйөк, изге эштәр
Ергә бүләк итер», — тип.

Ғүмер аҫҡан.
Ғүмер буйы
Рәхмәт әйтәм мин уға.
Изге фатихаһын һаҡлап,
Сығамын оло юлға.

## Мин шахтер

«Поэзия — та же добыча радия,
В грамм добыча, в год — труды...»
*В.Маяковский*

Эште һөйгән ошо ҡулдарыма,
Ирек биреп ташҡын-уйҙарыма,
Мин ҡәләмде алам, ҡағыҙ һалам,
Тойғоларым шиғри юлдар ала.

Алһыу таңды алсаҡ ҡаршы алған
Ғорур, көләс таусы һымаҡ, мин дә
Шағир-шахтер,
ҡулда — ҡәләм-кәйлә —
Шиғриәттә, сихри хеҙмәтемдә.

Тормош — шахта. Бына аҡтарамын
Ҡәләм-кәйләм менән уй-алтынды.
Эҙләйем мин, тирләп-бешеп бөтәм,
Әммә тапламайым саф антымды.

Йөрәгемде утҡа, һыуға һалып,
Туған халҡым, һиңә хаҡлыҡ илтәм.
Ҡәләм-кәйләм менән юлдар ярып,
Кешеләрем, һеҙгә барып етәм.

Мин бик шатмын,
тауҙар аҡтарғанда
Һеҙҙең өсөн хаҡ һүҙ-алтын тапһам,
Был тормоштоң гүзәл майҙанына,
Һеҙҙең ҡараштарға тәҙрә асһам.



*Алмас Рауил улы Шаммасов 1987 йылдың 10 июлендә Өфө ҡалаһында тыуған. 2004 йылда 136-сы һанлы башҡорт лицейын алтын миҙалға тамамлай. Әлеге көндә Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты башҡорт журналистикаһы төркөмө студенты.*

*Шиғырҙарҙы Алмас 8 йәшенән яҙа. Улар ваҡытлы матбуғатта, төрлө коллектив йыйынтыҡтарҙа донъя күрҙе. 2006 йылда «Илһам шишмәләре» төбәк-ара шиғриәт фестиваленең лауреаты исеменә лайыҡ булды. «Әсәй миңә ғүмер аҫҡан» — Алмас Шаммасовтың тәүге китабы.*

## Ҡолон

Ус төбөндәй йәйрәп ята
Йәшел болон.
Ә болондо иңләп саба
Сабый-ҡолон.

Ҡескәй ҡолон елдәй елә:
Йәшлек дәрте.
Йөрәгенән бит урғыла
Күңел кәре.

Ҡолон, һин бит минең, гүйә,
Тиңтер, йәштәш.
Яҙмышыбыҙ уртаҡтыр ул:
Һин йәш, мин йәш.

Елгә ҡаршы иркен һулап
Һин сабаһың.
Ҡәскәнән дә бер матурлыҡ,
Йәм табаһың.

Күбәләктәр менән гелән
Шаяраһың.
Күңелеңдә изге бөрө
Бит яраһың.

Кем булаһың, был турала
Әле уй юҡ.
Йөрәгең дә ярһыу тибәр,
Һөйөү тойоп.

Үҫеп етерһеңме, булып
Бер йөк аты.
Йөктәр ташып көн дә хеҙмәт
Тәмен татып.

Әллә булырһыңмы етеҙ
Толпар аттай,
Урал батыр менән сапҡан
Аҡбуҙаттай.

Еңерһеңме, етеҙ елеп,
Бәйгеләрҙә.
Әйләндерерһеңме башын
Бейәләрҙең?

Кем булһаң да, тормош юлың
Алда әле.
Һинең өсөн янған әсәң
Янда әле.

Һин сабаһың. Тормош-болон
Киң ул, ҡолон.
Сапһаң ине, изге булып
Намыҫ-юлың.

## Әсәйҙәр... Бәпәйҙәр...

Күҙҙәрем алдында әсәйҙәр,
Моңһоуҙар, уйсандар әсәйҙәр.
Ник һуң һин, эй, тормош,
шундайһың?! —
Әсәне йәберләй бәпәйҙәр.

Әсәйҙәр, әсәйҙәр, әсәйҙәр,
Күпме һуң һеҙҙә көс һәм ғәйрәт!
Тыуҙырған, үҫтергән бәпәйҙәр,
Ниңә һуң һалалар йәрәхәт?!

Илайым, үкһейем, һыҙланам —
Йәштәрен ағыҙа әсәйҙәр.
Ниңә һуң әрнетә, йәберләй
Әсәләр күңелен бәпәйҙәр?!

## Һыуыҡ

Тышта һыуыҡ. Ҡаты һыуыҡ.
Кешеләрҙә лә һыуыҡ —
Бармы сара йылытырлыҡ
Йәндәрҙе, ыуып-ыуып?!

Тышта һыуыҡ. Яман һыуыҡ.
Һыуыҡ алғандай быуып,
Булырмы бер күңелдәрҙән
Был һалҡындарҙы ҡыуып?

Кешелектең йөрәгендә
Ҡар-боҙҙар тора тыуып.
Булырмы һуң был боҙҙарҙы
Ут-нурҙар менән йыуып?

Булырмы һуң?!
Һыуыҡ... Һыуыҡ!..
Ҡалмаҫмы донъя туңып?!

